**Шәйехзада Бабич исемендәге Әсән урта дөйөм белем биреү мәктәбе**
**Дүртөйлө районы Башҡортстан республикаһы**

# Тема: Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙә һәм уҡыусыларҙа универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыуҙа хронотоп–схемалар ҡулланыу.

***Төҙөүсе:****Решаева Илүсә Дилфир ҡыҙы*

2015

Һәр сорҙа ла  башҡорт әҙәбиәте уҡытыусылары алдында уҡыусыларҙың ижади фекерләү һәләтен үҫтерү бурысы торҙо. Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса  уҡытыу процессында йәмғиәт өсөн  төрлө яҡлап үҫкән,  әҙәбиәт өлкәһендә әҫәрҙе үҙ аллы аңлай, баһа бирә, автор тыуҙырған образдар донъяһын ҡабул итә һәм күҙаллай белгән шәхес тәрбиәләү күҙдә тотола. Тик бөтәбеҙҙә беләбеҙ хәҙерге уҡыусылар китапҡа, матур әҙәбиәткә бик тартылмайҙар. Уҡыусылар өсөн китап- белем шишмәһе түгел, ә интернет- белем шишмәһенә әйләнеп бара. Әҙәби әҫәргә мөхәббәт уятыу өсөн нимә эшләргә һуң?

Билгеле булыуынса, хәҙерге заман балалары донъяны танып белеү яғынан “визуалдар”( күреп иҫтә ҡалдырыу) улар символдар, рәсемдәр, графиктар, таблицалар күреп  информацияны ҡабул итә.Ошонан сығып мин дә дәрестәремдә хронотоп-схемалар ҡулланырға булдым.

Нимәне аңлата һуң ул хронотоп тигән һүҙ? ***Слайд 1***

Хронотоп ( грек һүҙе chronos ваҡыт һәм   topos  урын ) – әҙәбиәттә сағылдырылған  урын һәм вакыт хаҡындағы күҙаллау, әҙәби әҫәр донъяһының әһәмиәтле  параметры.

Хронотоп тигән һүҙҙе иң беренсе булып 1920-се йылдарҙа Альберт Энштейн физика өлкәһендә ҡуллана. Аҙаҡ ошо терминды тарихсылар, философтар, сәнғәтте өйрәнеүселәр үҙ өлкәләрендә ҡуллана башлайҙар. 20-се быуаттың 70-се йылдарында хронотоп проблемаһы буйынса Рәсәйҙә бик күп конференциялар, семинарҙар үткәрелә. Ә әҙәбиәткә хронотоп терминын 1938-се йылда Михаил Бахтин индерә. ***Слайд 2***

Ваҡыт һәм урын проблемалары кешелек донъяһын һәр саҡ борсоған. Хатта ҡайһы бер кешеләр ваҡыт машинаһы эшләп ҡарағандар, улар әйтеүенсә беҙҙең ваҡыттан һәм урындан башҡа бүтән паралель ерҙәр ҙә бар.

Белгестәр әйтеүенсә, ваҡыт ҡарт кешеләр өсөн оҙағыраҡ үтә, йәштәргә ҡарағанда, был физик активлыҡҡа бәйле. Бөтәбеҙҙә беләбеҙ әгәр ҙә ваҡыт тиҙерәк үтһен тиһәң ул киреһенсә бик оҙаҡ үтә, ә ваҡыт етмәгәндә ул бик тиҙ аға.  Хатта йәмғиәтте өйрәнеүселәр төрлө цивилизация , йәмғиәт ҡатламдары ваҡыт һәм урынды төрлөсә ҡабул итә тип әйтәләр.

Йыш ҡына әҙәбиәттә урын-ваҡыт бирелеше символик мәғәнәгә эйә. Мәҫәлән, төн – ҡурҡыныс, шомло ваҡыт; таң – таҙарыныу  ваҡыты; көн – эш ваҡыты; кис – ял итеү, көҙ – картайыу; яҙ – яңанан тыуыу;  ҡыш – туҡтап ҡалыу;  йәй – сәсәк атыу ваҡыты.

Әҙәби әҫәрҙә урын һәм ваҡыт  ғәҙәттә бергә табыла. ***Слайд 3***

Әҙәби урын:

- реаль һәм шартлы (шартлы- автор уйлап тапҡан) ;
- ҡыҫылған һәм киң (бик күп урында ваҡиғалар бара, йә 1 ерҙә генә);
- ябыҡ һәм асыҡ була (автор йә әйтеп кенә китә, йә урынды ентекләп һүрәтләй).

Әҙәби ваҡыт:
- теүәл һәм билгеһеҙ (дата билгеле, йә юҡ);
- хыялый;
- үткән, бөгөн һәм киләсәк;
- психологик (эске тормош).

Әҙәбиттә бик күп төрлө хронотоплар бар. Мәҫәлән, идиллик ваҡыт- баласаҡ, атай-әсәй йортонда үткәргән бәхетле сор; мажаралы ваҡыт- сит ерҙәрҙе гиҙеү; серле ваҡыт-экиәттәрҙә бик күп ҡуллана. М-н, экиәттәрҙә батыр ай үҫәһен көн үҫә, бер аҙым атлаһа 1000 саҡрым уҙа.

Мин Ризаитдин Фәхретдиндең "Әсмә йәки ғәмәл вә яза", Ҡол Ғәлиҙең "Ҡисса-и-Йософ" әҫәрҙәренең хронотоп-схемаларын төҙөнөм. Ни өсөн ошо әҫәрҙәрҙе алдым?

1. улар икеһе лә уҡыусылар өсөн ауыр тел менән яҙылған, улар бөтә йөкмәткене аңлап бөтөрмәҫкә мөмкиндәр.
2. Был әҫәрҙәр 9-сы класта үтелә, ә улар башҡорт әҙәбиәтенән имтихан бирәләр һәм ошо схемалар уларға бик ярҙам итәләр әҙерләнгәндә.

Ризаитдин Фәхретдиндең "Әсмә йәки ғәмәл вә яза" романы буйынса эшләнгән хронотоп-схеманы ҡарап уҙайыҡ.

Иң беренсе координат һыҙайыҡ. Вертикаль һыҙыҡ ваҡыт, горизанталь һыҙыҡ урынды аңлатасаҡ. ***Слайд 5***

Һүҙ Бикмәт ауылы хаҡында барасаҡ. Ғәббәс мулла йорто һүрәтләнә. Ғаиләлә улар өсәү: Ғәббәс үҙе, ҡатыны Ғәйшә һәм 8-9 йәшлек ҡыҙҙары Әсмә. Ҡыҙыл нөктәләр төп героиня Әсмәнең тормош юлын күрһәтә. ***Слайд 6***

Тик бәхетле тормош бөтә, Ғәббәс муллаға ялған яла яғалар. Мулла үҙен яҡлар урынға хажға китә, бер айҙан үлгән тигән хәбәре килә. 1 ай үткәс Ғәйшә лә үлә. ***Слайд 7***

Тағын 1 аҙнанан һуң өйҙәре лә яна. Етем баланы үҙенә Йософ ҡарт ала. Унда Йософ ҡарттың йортонда ваҡытлыса йәшәп торған 1 шәкер менән таныша.Бер-береһен ярата башлайҙар (йөрәк рәсеме эшләйбеҙ). Бүләк итеп Ғәйшә шәкерткә көмөш балдаҡ бирә, ә шәкерт алтын тәңкә бирә. ***Слайд 8***

Әсмәне Хәмиҙә исемле ҡатын алдап “Ф..”  ҡалаһына теләнселек итергә алып китә. ***Слайд 9***

Аҙаҡ Әсмә бер бай ҡатын йортонда бәлиғ булғансы хеҙмәтсе була.Әсмәнең исемен Зәйнәпкә алмаштыралар. ***Слайд 10***

Әсмә аяғын һындырып хәстәханаға эләгә. Унан төрлө ҡалаларҙа, ауылдарҙа йөрөй. ***Слайд 11***

Ғ ҡалаһы һүрәтләнә. Әсмә Сәлих бай тәрбиәханаһын уҡып бөтөрөп шунда мөғәллимә була. Шунда 1 егеткә ғашиҡ була , ул шәкерт 10 йәшендә Йософ ҡарт өйөндә ғашиҡ булған егет булып сыға. Атаһы Ғәббәс мулла ла иҫән була, ул Юныс хәҙрәт булып сыға. Хажға киткәс әсирлектә булған. ***Слайд 12***

Ваҡыттарҙы ваҡыт тигән координата ҡырына яҙып барырға мөмкин.

***Ҡол Ғәлиҙең  “Ҡисса-и-Йософ” әҫәрҙәренең хронотоп-схемаһын ҡарап үтәйек.***

Иң беренсе координат һыҙабыҙ. ***Слайд 13***

Ваҡиға Ханған илендә башлана. Яҡуб һәм уның улдары тураһында һүҙ бара. Нөктәләр менән геройҙарҙы билдәләйбеҙ. Йософҡа ҡыҙыл нөктә ҡуябыҙ, сөнки ул төп герой. Ошо ҡыҙыл нөктә аша ярҙамында Йософ тормошонда барған ваҡиғаларҙы күрһәтәсәкбеҙ. ***Слайд 14***

Йософтоң төшө һүрәтләнә, 11 йондоҙ, ай һәм ҡояш күрә. Был төш төп геройҙың яҙмышында бик ҙур роль уйнай. ***Слайд 15***

Ҡоҙоҡто һүрәтләйбеҙ. Ағалары уны ҡоҙоҡҡа һала. Ҡыҙыл  һыҙыҡ менән Йософтоң тормош юлын күрһәтәбеҙ. ***Слайд 16***

Ағалары Йософто Малиҡ исемле бер сауҙагәргә һатып ебәрәләр. Төп герой ошо ҡарауан менән 3 ҡаланы уҙа. ***Слайд 17***

Йософ ҡарауан менән йөргәндә Рум (Византия) илендә батша ҡыҙы Зөләйхә Йософто төшөндә күрә, уға ғашиҡ була. Йөрәк эшләп ҡуябыҙ, ул яртылаш ҡына буялған, сөнки әле Зөләйхәнең генә мөхәббәте уяна. ***Слайд 18***

Зөләйхәгә Йософ мин Мысыр батшаһымын, тип әйтә. Зөләйхә Мысыр батшаһына кейәүгә сыға, тик батша Йософ булмай. 7 йыл буйы Мысыр батшаһы менән йәшәй, батша ҡырына үҙе урынына шайтан ҡыҙын ебәрә. Мысырҙа З. менән Й-тоң юлдары киҫешә. 2 йөрәк эшләйбеҙ. Й-тоң Зөләйхәгә мөхәббәте юҡ, З-неке Йософҡа бар, З-нең Мысыр батшаһына юҡ, Мысыр батшаһының З-гә бар. ***Слайд 19***

Зөләйхә Йософҡа мөхәббәтен әйтә, тик Йософ ҡабул итмәй.Шуның өсөн З. Й-то зинданға яба. Унда 12 йыл ултыра. Мысыр батшаһының төшөн яҡшылыҡҡа юраған өсөн, Мысыр батшаһы Й-то зиндандан сығара. ***Слайд 20***

Мысыр батшаһы Й-то батша итә. Бер ваҡыт ил буйлап йөрөгәндә Й. бер ҡарсыҡты күрә. Ул Зөләйхә булып сыға, бик ҡартайған. Мөхәббәтең көсөн дәлилләр өсөн Й-тоң ҡамсыһына өрә (ут эшләп ҡуябыҙ)  һәм Й-тоң ҡулын бешерә. Йософ уға ышана. Алланың ҡөҙрәте менән Зөләйхә 40 йәшкә йәшәрә. Өйләнешәләр. ***Слайд 21***

Аслыҡ башланғас Й-тоң ағалары Мысырға килә һәм унда улар күрешәләр. Аҙаҡ атаһы менән күрешә,атаһына 120 йәш була. 40 йылдан һуң атаһы үлә. ***Слайд 22***

Фәрештәләр Йософҡа 60 йыл ғүмерең ҡалған тип әйтәләр. Ул Әмин тигән ҡала төҙөтә, шунда 60 йыл уҙғас үлә. ***Слайд 23***

Был ҡиссала ваҡытты билдәләү ауырыраҡ, сөнки бында мажаралы, тылсымлы ил һүрәтләнә. Мәҫәлән, бер кеше Йософ ҡоҙоҡта булғанда уны күрергә килә, уға 1200 йәш була. Мәлиҡ Йософто ҡоҡоҡтан табыр өсөн 50 йыл көтә, ә Йософҡа был ваҡыт уҙмай.Зөләйхә 40 йәшкә йәшәрә.

Хронотоп схемалар менән эшләү быңдай маҡсаттарға ирешергә ярҙам итә: ***Слайд 24***

1. Телдән яуап биргәндә уҡыусыға күргәҙмәлелек ролен үтәй.

2. Уҡыусы ижади һәм танып белеү эшенә йәлеп ителә, әҙәби әҫәргә ентекле анализ яһарға өйрәнә.

3. Уҡыусыға шәхси фекерен әйтергә һәм үҙ нәтижәләрен яһарға булыша.

4. Әҫәрҙе схематик рәүештә ҡабул итергә һәм иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә.

Хронотоп-схемалар федераль дәүләт белем биреү стндарттары ҡуйған универсал ь уҡыу эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә үҙенә ала.

Шәхси УУЭ – уҡыусы ошо схемаларҙан сығып образдарҙан үҙенә ғибрәт ала.

Регулятив УУЭ- уҡыусы үҙ алдына маҡсат ҡуя, белмәгәндәрен белергә теләй. Уҡыусы үҙ схемаһына баһа ҡуя, үҙ хаталарын аңларға һәм төҙәтергә ынтыла.

Танып-белеү УУЭ- уҡыусы схеманы төҙөгәндә китаптан информация ала, төп һәм ярҙамсы мәғлүмәттәрҙе айырырға өйрәнә.

Коммуникатив УУЭ- уҡыусы коллективты үҙ схемаһы менән таныштыра, һорауҙарға яуап бирә, тиңдәштәре һәм уҡыусы менән диалог ҡора.

Беҙҙең Әсән мәктәбендә методик берләшмә ошо алым буйынса эшләй. Рус теле уҡытыусыһы һәм татар теле уҡытыусыһы ла хронотоп-схемаларҙың биҡ ҡулайлы икәнен әйтәләр. Уҡыусыларға хронотоп схемалар нигеҙендә әҫәрҙәрҙе өйрәнеү, иҫтә ҡалдыру, анализ яһау күпкә еңелерәк. Һәр бер уҡытыусы үҙенең дәрестәрендә хронотоп-схемаларҙы ҡуллана ала.

**Әҙәбиәт:**

1. Бахтин М.М. Формы времени и хронотопа в романе. Очерки по исторической поэтике // М.М. Бахтин. Вопросы литературы и эстетики. - М., 1975. - С. 234 – 407.
2. Есин А.Б. Время и пространство // Введение в литературоведение. Литературное произведение: основные понятия и термины /Под ред. Л. В. Чернец. - М., 2000 / http://lib.rus.ec/b/212090/read 3. 3.
3. Мәктәптә татар әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. / Д. Ф. Заһидуллина.- Казан:Мәғариф, 2004.
4. Эҙләнеүҙәр, табыштар: инновацион дәрестәр. /Ф. Ф. Рәхимов/- Бирск, 2010.